# Инйәр

*Аҫылғужа БАҺУМАНОВ,*
*яҙыусы*



Ангара башҡорт йылғаһы ул тиһәм, мине географияны белмәүҙә ғәйепләргә ашыҡмағыҙ. Һүҙ уйнатыуымдың сәбәбе шунда: Инйәр менән Ангара атамаларының бер тамырҙан икәнлеген барлыҡ топонимистар ҙа тиерлек таный хәҙер. Инйәрҙе башҡортсала йәнә Ингәр, Инжәр тип тә йөрөтәләр. Көнсығыш Себерҙәге киң билдәле Ангара исемен иһә төрки-монгол телдәрендәге «ангар», «ангара» һүҙҙәренә ҡайтарып ҡалдыралар. Башҡорттағы «оңҡор», «соңғор» тигәндең мәғәнәһе ана шул «ангар»ға тап килә, йәғни тау араларына ҡыҫылып, шаршыланып аҡҡан йылғаларға ҡарата әйткәндәр. Эйе, оңғорло-соңғорло урындарҙан баш ала Себер Ангараһы ла, Башҡортостан Инйәре лә. Икеһе лә тау-таш араларынан үҙҙәренә юл яра.

Гүзәл тау йылғаһы Инйәр халҡыбыҙҙың йырҙарында, риүәйәттәрендә телгә алына, уға арнап шиғырҙар сығарыла. «Ике Инйәрҙең бәхәсе» тигән риүәйәтте, мәҫәлән, күптәр хәтерләйҙер.

Кесе Инйәр дөйөм исеме Ямантау тип йөрөтөлгән мөһабәт тә, мәғрүр ҙә һырттарҙың көнбайышындағы күркәм Машаҡ һәм Нары тауҙары араһынан, ҡара урман төпкөлдәренән һығылып-йырылып сыға ла, эргә-тирәләге һыуҙарҙы йыя-туплай, көньяҡҡа ағып китә, ҡырсынташтар өҫтөндә сорҡолдоғон сыға. Ямантауҙың иң бейек түбәһе тапҡырына еткәндә ул аръяҡта, көнсығыш тарафта, Ҡомарҙаҡ итәктәрендә үҙенә аҙаш тағы бер йылғаның көнъяҡҡа ағып барғанын, үҙе кеүек үк шаршыларҙа шарлағанын белмәй ҙә. Ҡушылғандарына тиклем оҙонораҡ юл үткәне өсөн быныһын Оло Инйәр тип атағандар.

Ике Инйәр ҙә нәҙек тарлауыҡтар хасил итә, бейектә-бейектә уларҙы суҡайышҡан ҡаялар, кәбәндәй таштар, ҡайын-ҡарағайҙар ҡарап-күҙәтеп тора, хәйерле юл теләп ҡала. Ана, Кесе Инйәр Ҡараташ менән Кесе Ямантау араһынан ҡайнап килеп сыҡҡан ерҙәрҙә Айғыр ҡаяһы баҡҡан йылғаға, ул ысынлап та ялбыр яллы аҫауға оҡшап китә бер ҡарағанда. Ҡая исеменең дә легендаһы бар башҡортта: йәнәһе, эҙәрләүҙәрҙән ҡасып ошонда килеп ҡыҫырыҡланған ҡара айғыр ят ҡулдарға эләкмәҫ өсөн түбәнгә ташланған... Ана, Оло Инйәргә Һарыш ҡойған урындарға ҡара — ниндәй хозурлыҡ! Ике бер туған ҡушылған тирәләрҙе байҡа: сөм-йәшел ағастар уратымында тегендә лә, бында ла суҡайышҡан аҡ ҡаялар һуң ниндәй күркәм! Борон-борон замандарҙа, әллә нисәмә миллион йөҙ йылдар элек, был тирәләрҙә тауҙар булмаған, ә икһеҙ-сикһеҙ диңгеҙ йәйрәп ятҡан, һәм шул диңгеҙ төптәренән ҡалҡып сыҡҡан аҙаҡ был эзбизле ҡаялар. Ана, ҙур ҡасаба — Инйәр. Ул да ландшафттың үҙенсәлекле өлөшө ролен үтәй. Әүәле бында ауыл булған, уны Ҡамайылға тип атағандар, имеш. Булыр. Бәлки, Инйәрҙең олоһон шулай тип исемләгәндәрҙер әүәл, сөнки бында ҡама бихисап булған бит. Хәҙер ҡайҙа улар, бармы? Миндә мәғлүмәттәр юҡ. Ошондайҙары ғына бар: һуңғы ике быуат эсендә кешеләр Ер шарында һөтимәр хайуандарҙың 106 төрөн, ҡош-ҡорттоң 150 төрөн юҡҡа сығарған. Ҡасандыр атаҡлы Ҡама йылғаһына исем биргән йәнлектәрҙе лә ерҙә йәшәүҙән бөтөнләй мәхрүм итербеҙ, ахырыһы...

Инйәрҙе Башҡортостандағы иң үҙенсәлекле йылға иткән сифаттарҙың береһе уның төрлө-төрлө шаршыларға-тупһаларға бай булыуылыр, моғайын. Кескәй генәләре лә, уртасалары-ҙурҙары ла бер-

береһенә оҡшамаған уларҙың. Һәр береһенең үҙ көйө, үҙ моңо бар — шиғри тауышы бар. Ошо тыуған ер тауышы һәм моңо нисәмә быуын ата-бабаларыбыҙ күңелен хушһындырған да йөрәген елкендергән! Үҙ тыуған ере моңдарын әсә ҡарынында уҡ тыңлап үҫкәнгә лә башҡорт Уралына сат йәбешеп ятҡан, дошманына бирмәгән. Талағандар, көсләгәндәр — үҙ ирке менән һис бирмәгән.

Белорет районының Манышты ауылынан түбән Инйәргә уңдан Төлмәй ҡушылған арала — иң ҙур, иң көслө тәүге шаршылыҡ. Ағым бик шәп бында, йылға ярайһы уҡ текәгә түбәнләй. Тағы ла бер ҙур шаршылыҡты үткәс, киң генә ятыуға сығаһың, тәрәнлеге 5—7 метрҙарға етә. Инйәр бер аҙға ҡапыл ғына тынысланып ҡалғандай, хәл йыйғандай. Күпме балыҡ ятыуҙа! Ул бәрҙеһе, бүтәне. Ун биш йыллап әүәлерәк бәхетлеләр ҡыҙылбалыҡ та тотҡолаған, тиҙәр. Хәҙер, ана, Ағиҙел үрендә генә ҡалған һәм «Ҡыҙыл китап»ҡа индерелгән. Шундай матурҡай ҙа юғалһын әле Инйәрҙән, ә бит ул таҙа һыулыларҙан һанала. Бигерәк тә Оло һәм Кесе Инйәрҙәр. Мәҫәлән, Айғыр станцияһы тирәһендә Кесе Инйәрҙең болғансыҡлығы бер кубометрға йәйгеһен 4 грамм, көҙгөһөн 5 һәм ҡышҡыһын 3 грамм тура килә. Сағыштырығыҙ: яҙғыһын — 28 грамм! Инйәрҙә һыуҙың бик йомшаҡ булыуын да әйтеп үтәйек.

Инйәр буйҙары ағасҡа бай ғына. Айырыуса йүкә күп. Ҡарағай ҙа бар. Архангель районында бер ауылды тап шулай атағандар ҙа. Ҡарағай ауылы ҡаршыһында сәтләүек ҡыуаҡлыҡтары ҡуйы булып үҫкән. Ғалимдар әйтеүенсә, ошо үҫемлек төрөнөң иң көнсығыш сиге был. Ҡыуаҡлыҡтар бейеклеге 120 сантиметрға етә, 3,5—4,5 метрға еткәндәре лә бар. Ошо урынды дәүләт һаҡлауына алырға тәҡдим ителгән. Ҡарарҙар оҙаҡ сығарыла, шуғаса тәләфләп ташламаһаҡ ине был тәбиғәт ҡомартҡыһын. Йәнә лә ошонда Көньяҡ Уралда һирәк осраусы астрагал кеүек ҡайһы бер үҫемлек төрҙәре бар, һаҡлауҙы талап итә.

Белорет районының Асы ауылы тирәһендә минераль һыу сығанаҡтары бик күп. Дауаланырға тип Рәсәйҙең төрлө урындарынан киләләр, даны бар, ләкин сама самаға тура килмәй. Бында дәүләт санаторий-курорты асып ебәрергә күптән ваҡыт. Ауылдың бөйөк артисыбыҙ Арыҫлан Мөбәрәковтың тыуған ере икәнен дә онотмайыҡ. Асынан түбәндәрәк Инйәр текә ҡаяларға барып терәлә лә ҡапыл көньяҡҡа борола, ошо урында эреле-ваҡлы мәмерйәләр осрай. Ҡыҫҡаһы, дауалау һәм туризм өсөн ғәйәт киң мөмкинлектәр бар.

Шаршыларҙан-шаршыларға һикереп, шаулап-гөрләп, Инйәр Елмәрҙәк ҡыҫаларынан ысҡына ла Йөйәк ауылы тирәһендә әҙерәк ирәбеләнеп китә, ләкин тигеҙлектәргә еткәнсе байтаҡ барырға әле. Унда инде ерҙәр ҙә бүтән, тәбиғәт тә башҡасараҡ.

Инйәрҙең оҙонлоғо 305 саҡырым самаһы. Кесе Инйәр 109 саҡырым юл үтә «ағаһына» ҡушылғанға тиклем. Инйәргә Гөлмәй, Баҫыу, Аҫҡын кеүек эреле-ваҡлы бик күп йылғалар, шишмәләр, инештәр ҡоя. Хәҙерге мәлдә бассейнының майҙаны 1030 квадрат километр иҫәпләнә, алтмыш йыллап элек 1650 булған. Белорет—Шишмә тимер юлы төҙөгәндә Инйәргә айырыуса ҙур зыян яһалды.

